***Ҡәҙим АРАЛБАЙ,***
***шағир, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары***

# Афзал Таһиров һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы



*Афзал Таһиров*

Башҡортостан Яҙыусылар союзының беренсе рәйесе Афзал Мөхөтдин улы Таһировтың был ижади ойошмаға нигеҙ һалыуҙа һәм уны ойоштороп, эшләтеп алып китеүҙә роле ҙур. 1934 йылдың 15—18 мартында уҙғарылған I съезда идара рәйесе итеп һайлағанда яҙыусы Афзал Таһировҡа 44 йәш була. Күренеүенсә, ул инде ярайһы уҡ тормош тәжрибәһе туплаған, партия һәм совет органдарында эшләп һыналған тоғролоҡло большевик, дәүләт эшмәкәре булыуы менән бергә, күренекле башҡорт яҙыусыһы ла. Был осорға уның күп һанда хикәйәләре, повестары, драма әҫәрҙәре һәм “Һалдаттар” (1932) романы, ике томлыҡ “Һайланма әҫәрҙәре” (1932—1934) донъя күргән була. 1934 йылда А.Таһировтың әҙәби ижадтағы эшмәкәрлегенә 25 йыл тулыу ваҡиғаһы Башҡортостанда һәм Мәскәүҙә киң билдәләнә. Күп яҡлы йәмәғәт эшмәкәрлеге һәм актив яҙыусылыҡ эше юғары баһалана: “Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәре” тигән маҡтаулы исем менән ул республикала беренсе булып бүләкләнә. Бохара республикаһының “Хеҙмәт” орденының да тәүге кавалерҙарының береһе Афзал Таһиров була. Мәскәүҙә, Өфөлә, Ҡазанда, Ташкентта һәм Сәмәрҡәндтә китаптары баҫылып сыға.

Бына ошондай билдәле яҙыусының, абруйлы дәүләт эшмәкәренең 1934 йылда СССР Яҙыусыларының I съезында башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш юлдары тураһында доклад яһауы ла, СССР Яҙыусылар союзының идара ағзаһы итеп һайланыуы ла, СССР Яҙыусылар союзының Минск ҡалаһында уҙғарылған күсмә Пленумындағы сығышы ла һис тә осраҡлы түгел ине.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы төҙөлөүенең тәүге көндәренән тиерлек йәш әҙиптәрҙе үҫтереүгә, өлгөрөп еткән ҡәләм оҫталарын союз сафына ағза итеп алыуға ҙур иғтибар бирелә. 1935 йылда, мәҫәлән, Башҡортостанда 67 әҙәби түңәрәк эшләй, шуларҙың 34-е башҡорт телендәге әҙәби түңәрәк була.

1935 йылдың 2 апрелендә А.Таһиров рәйеслегендә үткән СССР Яҙыусылар союзы идараһы ултырышында бер төркөм башҡорт яҙыусыларын Союзға алыу мәсьәләһе ҡуйыла.

СССР Яҙыусылар союзы ағзалығына тәҡдим ителеүселәр исемлеге:
1. Иван Недолин.
2. Мөхөтдин Тажи.
3. Али Ҡарнай.
4. Әкрәм Вәли.
5. Ғәли Мөхәмәтйәнов.
6. Ҡасим Ғирфанов.
7. Һәҙиә Дәүләтшина.
8. Әхмүш Салихов.

Стажерлыҡ һынауына алыныусы йәш әҙиптәрҙең исемлеге лә ҡарала идарала. Бына ул кандидаттар: Әхмәт Хәдисов, Мазһар Абдуллин, Абдулла Искәндәров, Абдулла Ильясов, Фәйзи Бикбов, Ғәйнан Әмири, Исмәғил Байымбәтов, Хәсән Мохтаров, Абдулла Әминев, Батыр Вәлидов, Рәшит Ниғмәтуллин, Ғәйнан Хәйри (Үҙәк дәүләт архивы, Ф.10292, ОП.1, Д.13, Л.35).




Әҙәби түңәрәктәр эшенә иғтибарҙың артыуын йәнә бер факт асыҡ дәлилләй: 1936 йылдың сентябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзының дөйөм йыйылышы идара рәйесе А.Таһировтың “Әҙәби түңәрәктәрҙең эшен йәнләндерергә кәрәк” тигән махсус докладын тыңлай (доклад рус телендә. Башҡортостан Яҙыусылар союзының 75 йыллығына сығарылған “Ил яҙмышы, заман һулышы” китабына индерелде. Өфө, 2009. 69—73-сө биттәр).




Йомғаҡлап әйткәндә, Афзал Таһиров үҙе сәйәси репрессия ҡорбаны булғансы (1937 йылдың сентябрендә Ҡисловодскиҙә ял иткәндә ҡулға алына һәм шул уҡ йылда 27 сентябрҙә атыла), Башҡортостан хөкүмәте башлығы вазифаһында яуаплы хеҙмәте менән бергә Яҙыусылар союзының ижади-ойоштороу эштәренә етәкселек итеүҙә лә активлыҡ күрһәтә.

1990 йылдың көҙөндә күренекле дәүләт эшмәкәре һәм яҙыусы Афзал Таһировтың 100 йыллығы киң билдәләп үтелде. Башҡортостан Яҙыусылар союзы (рәйесе Д.Бүләков) менән Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты (директоры З.Ураҡсин) КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына хат менән мөрәжәғәт иттеләр. Был хатта А.М.Таһировтың 100 йыллыҡ юбилейына әҙерлек саралары һәм күренекле шәхестең яҡты исемен мәңгеләштереү буйынса байтаҡ тәҡдимдәр, теләктәр яҙылғайны. Байрам саралары 1990 йылдың 25 октябрендә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында уҙғарылды. Ә унан бер көн алда Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән берлектә ойошторған ғилми конференция ла А.Таһировтың ижадын яҡтыртыуға бағышланды. Юбилей сараларында Мәскәү, Ташкент, Ҡазан, Нуҡус (Ҡараҡалпаҡ АССР-ы) ҡалаларынан саҡырылған арҙаҡлы ҡунаҡтар менән бергә А.Таһировтың яҡташтары — Татарстандың Әлмәт районынан вәкилдәр ҙә ҡатнашты.

1990 йылдың 21—23 ноябрендә А.М.Таһировтың 100 йыллыҡ тантаналары уның тыуған яғында — Татарстандың Әлмәт ҡалаһында һәм тыуған ауылы Абдрахманда үтте. Беҙҙең делегация составында Афзал Таһировтың ҡыҙы, күренекле балет артисткаһы Майя Таһирова, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, шағир Ҡәҙим Аралбаев, филология фәндәре кандидаты, әҙәбиәт белгесе Суфиян Сафуанов һәм ҡурайсы Таһир Хәмитов бар ине.




Яҙыусының тыуған ауылы Абдрахманда беҙ митингта, А.Таһировҡа мемориаль таҡта асыуҙа, мәктәбендә музей асыу тантанаһында, кисен мәҙәниәт һарайында юбилейға арналған әҙәби-музыкаль кисәлә ҡатнаштыҡ.

23 ноябрҙә район үҙәге Әлмәттә А.Таһиров исеме бирелгән урамда булдыҡ, ҡала менән таныштыҡ, драма театрында уҙған юбилей кисәһендә сығыш яһаныҡ.

Афзал Таһировтың тыуған яғында булыу ҡайһы бер мәғлүмәттәр бирҙе.

Абдрахман ауылы музейында Абдрахман ауылына “башҡорт Абдрахман нигеҙ һалған” тип теркәлгән документтар һаҡлана.




А.М.Таһиров тыуған йорт һүтелгән. Хәҙер уның нигеҙенә һалынған йортҡа мемориаль таҡта ҡуйылды. Абдрахман ауыл Советы (рәйесе Нажиә Мәүлетбаева) әлегә 1 Май исемендәге урамды Афзал Таһиров исемендәге урам тип үҙгәртергә тигән ҡарар ҡабул итте. Ауылда Афзал Таһировҡа һәйкәл (бюст) дә ҡуйырға тигән фекер әйтелде.

Абдрахман ауылында әле “Башҡорт осо” тип йөрөтөлгән төбәктә беҙҙең милләттәштәр йәшәй. Телдәре татарсараҡ булһа ла, күп лексик һүҙберәмектәр саф башҡортса. Абдрахман ауылы кешеһе, элекке уҡытыусы Баһманов Сабир Ноғман улы, А.Таһировтың һеңлеһе Таһирова Ғәлимә Шәрәфи ҡыҙы менән яҡындан аралашып һөйләшеүҙәр, әңгәмәләр уларҙың әле лә башҡорт телен һаҡлауҙарын дәлилләй.

Ауылдың ҡәбер таштарындағы тамғалар был тирәлә йәлдәк, байлар, юрмый, йылан, гәрә һәм уран башҡорттары йәшәгәнлегенә

ишара. Тарихи сығанаҡтарҙы һәм урындағы этнографик мәғлүмәттәрҙе өйрәнгән тарихсы һәм телсе ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәре лә быны раҫлай (ҡара: Р.Янғужин. Башҡорт ырыуҙары. Өфө, “Китап”, 1998. 92—94-се биттәр; А.Ҡамалов, Ф.Ҡамалова. Атайсал. Өфө, “Китап”, 2001. 386—387-се биттәр). А.Таһировтың яҙыусылар союзына ингәндә тултырған анкетаһы.

* * *

Күренекле дәүләт эшмәкәре һәм яҙыусы Афзал Таһировтың биографияһындағы Урта Азия осоро (1922—1925 йылдар) беҙҙең әҙәбиәт тарихында бик аҙ өйрәнелгән. Үзбәкстанда һәм Ҡараҡалпаҡстанда ул баҫмасыларға ҡаршы көрәштә, Хорезмда Совет власы урынлаштырыуҙа актив ҡатнаша. ВКП(б)-ның Хива өлкә комитетында агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире булып эшләй, “Инҡилаб ҡояшы” гәзитенең беренсе мөхәррире була.

А.М.Таһировтың Төркөстан Республикаһында Совет власы урынлаштырыуҙағы эшмәкәрлеген тарих фәндәре кандидаты, беҙҙең яҡташыбыҙ Люция Ғәзиз ҡыҙы Басирова байтаҡ йылдар Ташкентта йәшәгәндә өйрәнде. Архив материалдарына нигеҙләнеп, 1980-се йылдарҙа беҙҙең республика матбуғатында төплө материалдар баҫтырҙы. Үкенескә ҡаршы, Л.Басированың тикшеренеүҙәре, А.Таһиров хаҡындағы ғилми хеҙмәттәре ул йылдарҙа тейешле хуплау тапманы. Ул документаль эҙләнеүҙәрҙе айырым китап итеп донъяға сығарыу — киләсәк быуындар эше.

А.Таһировтың 100 йыллығын юғары кимәлдә билдәләгәндә (1990 йыл, октябрь) планлаштырылған эштәрҙең береһененең дә ошоғаса тормошҡа ашырылмауы бер кемде лә биҙәмәй, әлбиттә. Ошо уҙған егерме биш йыл эсендә яҙыусының бер генә китабы ла донъя күрмәгән, баш ҡалабыҙ Өфөлә Афзал Таһиров исемендәге урамда юҡ, ул йәшәгән йортҡа мемориаль таҡтаташ та ҡуйылмаған...

Ялҡынлы революционер, күренекле дәүләт эшмәкәре, Башҡортостан Яҙыусылар союзына нигеҙ һалыусыларҙың береһе һәм унның беренсе рәйесе Афзал Мөхөтдин улы Таһиров хатта яҙыусы-әҙип булараҡ ҡына ла онотолорға тейеш түгел. Уның әҙәби мираҫы бай: егерменән ашыу пьеса, өс роман, биш повесть, күп һанда хикәйәләр, очерктар, мәҡәләләр ул йәшәгән дауыллы замандың тере һулышын беҙгә бөрккәндәй, уҙған быуаттың күренекле шәхестәренең йөҙҙәрен, ҡылыҡ-холоҡтарын, аяуһыҙ көрәшен тергеҙгәндәй...

Бына ни өсөн беҙҙең — яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре Афзал Таһировтың рухи вариҫтарының — уны онотторға хаҡыбыҙ юҡ. Әгәр онотһаҡ, киләсәк быуындар беҙҙе ғәфү итмәҫ...

## БЕҘҘЕҢ ЙӨРӘК — ҠӘБЕРЕГЕҘ

Сталинизм ҡорбандары — Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый, Булат Ишемғол, Төхфәт Йәнәби, Ғабдулла Амантай, Имай Насыриҙарҙың яҡты иҫтәлегенә...

Ауҙарҙылар бер мәл айыбыҙҙы,
Ҡаранғылыҡ баҫты аңыбыҙҙы,
Балҡый күктә ҡояш, айыбыҙ бар,
Ә айырып булмай юлыбыҙҙы.

Сая рухлы күпме азаматты
Әпкәләйҙәр аҙым һайын һатты.
Ил улдарын, халыҡ дошманы, тип
Ултыртыусы хас дошмандар артты.

Еребеҙҙе баҫты ҡараңғылыҡ,
Йәнебеҙҙе аҫты ҡара ҡылыҡ.
Ҡотҡарырға уны ниҙәр ҡылып,
Яҡтыртырға уны ниҙәр яғып?

Күтәрелеп палач балталары,
Күпме йылдар илдә ҡан таланы,
Төрмәләрҙә, тамуҡ-лагерҙарҙа
Яҙмыштарҙы иҙҙе, ботарланы...

Һеҙҙе палач ергә күмдем, тине,
Бирҙе хисап: барыһы үлде, тине,
Хаталанды иллә:
Ергә түгел,
Беҙҙең йөрәктәргә күмде һеҙҙе.

Торғонлоҡтоң әүәҫ ҡуштандары,
Диктаторҙың үтәп ҡушҡандарын,
Исемегеҙҙе һыҙҙы тарихтарҙан...
Тик буламы тыйып ташҡындарҙы?!

"Билдәһеҙҙәр" һаман ҡай берегеҙ,
Арта бара әммә ҡәҙерегеҙ.
Бер үкенес: сәскә һалырлыҡ та
Ер өҫтөндә юҡ бит ҡәберегеҙ.

Ҡаплап торғас аңды дан ышығы,
Быуғас юлды юха шыуышыуы,
Булғас йәндә "ут һыу" ҡауышыуы,
Эйе, яңы сыҡты тауышыбыҙ.

Үтте заман — байтаҡ йәшерендек,
Бөгөн, һеҙ, тип әрней хәтеребеҙ,
Бөгөн, һеҙ, тип дөрләй йөрәгебеҙ,
Беҙҙең йөрәк — һеҙҙең ҡәберегеҙ!..

Ҡараңғылыҡ ҡаплай аңыбыҙҙы,
Ҡара ҡылыҡ таплай ҡаныбыҙҙы...
Ҡөтәһе юҡ! Ҡалды үҙебеҙгә
Аттыраһы атыр таңыбыҙҙы,
Яндырып та йөрәк майыбыҙҙы...